Динебеҙ, еребеҙ

# ФӘҺЕМЛЕ ТАБЫН

Ғилман ҒӘНИЕВ

Ғүмәр мулла кеҫә телефонынан ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына һөйләшкәндән һуң: “Ҡабат шылтыратмай тороғоҙ, аят башларға ниәтләгәнбеҙ”, - тип, уны кеҫәһенә һалып ҡуйҙы.

- Йәмәғәт, хөрмәтле мосолман ҡәрҙәштәрем, ике бала әсәһе Шәһиҙә мәрхүмәнең йыллығына бағышлап, аятҡа йыйылғанбыҙ. Ултырышҡанға ҡәҙәр бер-ике хәҙис һөйләп ишеттерәйем, - тип һүҙ башланы Буранбай ауылы аҡһаҡалы. - Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһиссәләм әйткән көндәлек эштәрегеҙҙе нисек дөрөҫ тип табаһығыҙ, шулай атҡарығыҙ. Хаталанһағыҙ, изгелекле эштәр башҡарып, гонаһтарығыҙҙы ярлыҡағыҙ. Белеп йә белмәй ҡылған гонаһтарығыҙҙы - көндәлектәге намаҙҙарығыҙ, йәмәғәт менән мәсеттә уҡылған йома намаҙҙары аҙна эсендәге гонаһтарығыҙҙы ярлыҡай.

- Ғүмәр ағай, беҙҙең Сәйетғәле ҡартатайыбыҙ бик уҡымышлы һәм көслө мулла булды, намаҙынан совет власы ла айыра алманы, ә атайыбыҙ Ғәйнулла данлыҡлы ҡурайсы ине. Хәҙер диндә музыканы тыялар, шул дөрөҫмө? Асыҡлап ҡына үтһәгеҙ ине. Ҡартатайыбыҙҙың атайыбыҙҙы ҡурайҙа уйнауҙан тыйғанын бер ҙә хәтерләмәйем, киреһенсә, хуплай ғына торғайны, Мәфтүхә киленен (әсәйебеҙҙе) йырлатып тыңлай ине. Ә институттың музыка бүлегендә укыған улым дүртенсе курстан уҡыуын ҡалдырҙы ла ҡуйҙы, - тинем мин.

- Ысынлап та, һәр эштең үҙ тәртибе булған кеүек, ҡайҙа ла саманы белеү кәрәк. Динебеҙ бейеүҙе лә тыймай, әммә матур кейемдәр менән ғәүрәтеңде ябып, килешле хәрәкәттәр яһап, ниндәйҙер күренеште йәки ваҡиғаны бейеү аша күрһәтә алаһың икән, бик мәслихәт, әйҙә, бейе. Йырға килгәндә инде, Аллаһы тәғәләбеҙҙе маҡтап һәм кешелек донъяһына һөйөү, мөхәббәт менән һуғарылған йырҙарҙы матур көйҙәре һәм мәғәнәле һүҙҙәре менән йырлау кәрәк. Ә тыйыу көсәйеүе үҙәк телевидениеның һәм уға эйәреп башҡа музыка программаларының тотанаҡһыҙлыҡ пропагандалауынан киләләр. Ҡурайға ҡарата шуны әйтерп үтеү кәрәктер: һәр халыҡтың үҙе яралтҡан һәм яратҡан музыка ҡоралдары бар, уларҙы динебеҙ бер ҡасан да ситләтмәне. Халҡыбыҙ күңелендә, йөрәгендә тамырланған ҡурайҙы алып ташлау мөмкин дә түгел, - тип яуапланы аҡһаҡал.

- Ҡурай тураһында һүҙ сыҡҡас мин дә үҙем менән булған хәлде һөйләп үтәйем әле, - тип һүҙгә ҡушылды Мифтахетдин бажа. - Төмән өлкәһендә эшләгәндә булғайны ул. Бер көн сменаны тапшырғас, арып-талып дөйөм ятаҡҡа ҡайттым да, сәй ҡайнағансы тип, үҙемдән бер тотам ҡалдырмаған ҡурайымды ҡулыма алдым. Бүлмәлә яңғыҙым ғына. Ялға ҡайтырға апаруҡ ваҡыт бар әле, туған-тыумаса һағындырған. Һәлмәк кенә итеп үҙебеҙҙең көйҙәрҙе һыҙғырта башланым. Бер мәл күрәһең онотолоп-хисләнеп, моңға бирелеп киткәнмендер. Ҡапыл бүлмә ишеге асылып китте лә, бергә йәшәгән урыҫ егете Александр атылып килеп инде һәм мөйөштә ултырған телевизорға текәлде: “Извини, сосед, что ворвался. Быстрее включи телик, концерт передают, только что слышал мелодию на курае”, - тине. Минең ҡулдағы ҡурайҙы күргәс кенә эштең ниҙә икәнен аңлап, тағы уйнауымды үтенә башланы. Кемгә нисектер инде, ҡурайҙы ҡүмәк кеше араһынан берәүҙең булһа ла ихлас күңелдән тыңлауын күрһәң дә дәртләнеп, хисләнеп уйнарға ла уйнарға була. Ә бында урыҫ егете башҡорт ҡурайының моңонон үҙ итеп үтенеп торғас, инәлт-мәнем, тағы ла илһамланып уйнап ебәрҙем. Бер ҡараһам, Сашаның күҙҙәре йәшләнгән, бөтөнләй шымып ҡалған. Көй бөткәс, миңә күтәрелеп ҡараған булды ла: “Спасибо, земляк, будто на родине побывал, на душе так легко стало. Я ведь тоже из Башкортостана. Вот уже более года безвыездно работаю, соскучился. Завтра же иду оформляться на вахту или буду просить отпуск”, - тип ҡуйҙы.

Йөрәктәрҙең иң-иң изге һәм тәрән ҡылдарын тирбәлдерә ҡурай моңо. Берсә ҡар-бурандар шашынғанын, берсә тау битендәге ағастарҙың шаулауын, көҙге ҡара һыуыҡта телеграф бағаналарының геүләүен, диңгеҙ тулҡындарының шауын, шишмәләрҙең сылтырап ағыуын, ап-аҡ күлдәк кейгән ҡыҙҙарҙың бейеүен һынландыра был сихри ҡорал. Моңландыра ла, һыҙландыра ла, дәртләндерә лә, илата ла, көлдөрә лә уның зары. Әҙәм балаһының ниндәй милләттән булыуына ҡарамай, барыһын да әсир итер ҡөҙрәткә эйә ҡурай.

- Ҡөрьән Кәримдә егерме биш пәйғәмбәр исем-шәрифтәре менән килтерелә, - тип һүҙен дауам итте Ғүмәр мулла. - Иң беренсе пәйғәмбәребеҙ - атабыҙ Әҙәм, ә инәбеҙ - Һауа. Ҡөрьән Кәримде ҡабул итеүсе һәм Ислам динен таратыусы - Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһиссәләм, ахыры заманғаса бүтән пәйғәмбәр булмаясаҡ. Ә уға тиклемге пәйғәмбәр - Ғайса пәйғәмбәр. Уның әсәһе - Мәрйәм. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте: иргегтттәрҙең ҡағылышы булмаһа ла, Мәрйәмдең ҡыҙ килеш малай таба алыуы үҙе бер мөғжизә.

- Төньяҡ Уралда, Качканар тигән ҡалала, әллә нисә тиҫтә йыл ғүмер итеп, төрлө милләт вәкиле, төрлө дип әһеле менән аралашып, бер ғаилә балалары кеүек йәшәйбеҙ, - тип һүҙгә ҡушыла ике туған Сәйҙә апайыбыҙ. - Ҡөрьән Кәримде ҡабат-ҡабат уҡып сыҡтым һәм шуны әйткем килә: хәтерләйһендер, Ғилман ҡустым, бала саҡта Урыҫбай ауылына барып, Сәлихә өләсәйҙәрҙә йоҡлап ҡайта инек. Ул беҙҙе йоҡларға һалғандан һуң, балалар, тынысланығыҙ, мин һеҙгә ҡарһүҙ һөйләйем, тип, йомшаҡ тауышы менән әле беҙ аңлап та етмәгән пәйғәмбәрҙәр тарихы тураһында һүҙ башлай ине. Ул ваҡытта ундай мәғлүмәттәрҙе ҡайҙан алып һөйләгәндер, һәр барған һайын бер-береһенә оҡшамаған яңы тарих бәйән итә торғайны бит. Бала күңелендә шул ишетелгән ваҡиғалар нык уйылып ҡалған. Ә Сәлихйән ҡартатайыбыҙ, ысынлап та, ҡартайып, гүр эйәһе булғансы намаҙынан айырылмаған. Эйе, коммунистар партияһы ағазаһы булһа ла, намаҙын йәшерен генә уҡып йөрөгән. Беҙ, ейәндәре, күмәкләшеп барып төшкән саҡта ҡартатай мәрхүм намаҙын өй башына менеп уҡыған икән. Быны күргән Рәшиҙә апайыбыҙ беҙгә ул турала яңыраҡ ҡына һөйләне. Партия ағзаһы булмаһа, уны хисапсы ла, һатыусы ла итеп эшкә алмаҫтар ине.

- Ахирәттә, - тип һүҙен дауам итте Ғүмәр мулла, - иң беренсе һорау фани донъяла йәшәгәндә намаҙ уҡыу йә уҡымау тураһында булыр. Был инде намаҙҙың Ислам диненең биш таянысының иң мөһиме икәнен аңлатҡан ғәмәл. Үҙ ваҡытында уҡылған намаҙ тәүлек әйлдәнәһенә Ер шарын биш тапҡыр аҡ энергияһы тулҡыны менән урап сыға икән. Барыбыҙ ҙа намаҙ уҡыһаҡ, ҡара көстәргә һис тә урын ҡалмаҫ ине.

- Һүҙегеҙгә ҡеүәт, хәҙрәт. Мин дә намаҙ тураһында үҙем менән булған хәлде һөйләп үтмәксемен, - тип һүҙгә ҡушылды Гүзәл һеңелем. - Бер сәфәрҙә ауырып киттем. Юл Аҡнаҙар ауылы аша үтә. Унда мулла йәшәгәнен ишетеп белә инем, әйҙә, инеп сығайыҡ, тип ауылға боролдоҡ. “Бик көслө муллалар тоҡомонан икәнһегеҙ, ошоға ҡәҙәр барығыҙ ҙа ҡартатайҙарығыҙ намаҙҙары менән бәлә-ҡазанан, афәттән, сырхауҙан һаҡланып килгәнһегеҙ, әммә ваҡыт үтеү менән ул көс бөткән, - тине Аҡнаҙар ауылы муллаһы һәм, - ауырыуың үтер, әммә артабанғы тормошоғоҙ



хәҙер үҙ ихтыярығыҙҙа”, - тип оҙатып ҡалды беҙҙе. Ысынлап та, бер туған ун бер бала араһынан Шәһиҙә ҡарындашыбыҙҙың Себерҙән табутта ҡайтыуы, ике туғандар араһында ла мәрхүмдәр барлығы шуға бәйле түгелме? Намаҙҙарыбыҙҙың һәр рәкәғәте һәр беребеҙҙең бер көнлөк яҙмышын хәл итмәйме икән?

Саҡырылған туғандар өҫтәл артында теүәлләнгәйне. Йырлаусы булараҡ та билдәле Ғүмәр ағайҙың моңло тауышы менән аят башлауы барыбыҙҙы ла серле донъяға алып инеп киткәндәй тойолдо. Уҡылған сүрәләр, доғалар аңлашылып та етмәүе менәнме, әллә ғәрәп теле үҙе сихри көскә эйәме, һәр беребеҙҙең йәне-тәне аша ниндәйҙер йылы, яҡты энергия ағымы үткән кеүек тойолдо. Кемдеңдер ҡарашы аҡ өҫтәл ябыуына төбәлгән, кемдендер күҙҙәре йомолған, ә кемдер үҙен ниндәйҙер йышлыҡта тирбәлгәндәй тойҙо.

Аят тамамланды, изге теләктәр әйтелде, табынға аш килтерелде.

- Һәр бер ризыҡтан ауыҙ итегеҙ, туғандар, аят ашын доғалар өмөт иткән ахирәттәге яҡындарыбыҙҙың беҙҙең тойғоларыбыҙ аша теләктәребеҙҙе һәм уйҙарыбыҙҙы ҡабул иткәнен онотмайыҡ, - тип, хужабикә һәм уның ярҙамсылары йүгерешеп йөрөп ҡунаҡтарҙы һыйлай башланы.

Абыстай менән Ғүмәр мулланың артынан ишек ябылып та өлгөрмәне, Сергей кейәүебеҙ, түбәтәй урынына кейгән йөндән бәйләнгән башлығын сисеп:

- А все-таки обычаи у мусульман почеловечней, а у нас, как юморист Петросян по ТВ рассказывал пока хоронили тещу, порвали два баяна. Наши бы уже давно подняли планку градуса на определенную высоту, - тип ҡуйҙы.

Уның һүҙен ишетмәгәндәй, Әлфиә һеңлебеҙ, урынынан тора биреп:

- Туғандар, барығыҙ ҙа беләһегеҙ, мин биш бала тәрбиәләгән өсөн Өфөнән “Әсәлек даны” миҙалын алып ҡайттым. Шуға күрә һеҙгә тәғәйенләп, баш ҡаланан күстәнәс тә алғайным. Үлән төнәтмәһенән яһалған, градусы ла юҡ тиерлек. Бергә йыйылған мәлдә барығыҙға ла ауыҙ иттерәйем тигәйнем, - тине.

- Үҙендең малайыңдың атаһы вафат булғас, ике сабый балалы иргә тормошҡа сыҡтың, уртаҡ ҡыҙ ҙа таптығыҙ. Шәһиҙә мәрхүмәнең ҡыҙын да үҙ ҡанатығыҙ аҫтына алдығыҙ, изгелегең мәртәбәле, - тине Рәшиҙә апай. _ Тик аят уҡылған көндә күпме сауаплы булғанбыҙ, шул тиклем гонаһлы булып ҡуймайыҡ. Әйҙәгеҙ, ҡунаҡҡа саҡырышһаҡ та, был яғына шул хәрәм эсемлекте ауыҙ итмәйек. Хәрәм әҙәмде әрәм итә. Нәфсебеҙ менән көрәшәйек - иң сауаплы эш ана шул.

Апайбыҙ шулай тигәс, барыбыҙ ҙа тынысландыҡ.

- Юлай ҡәйнеш, - тип өндәште Нурғәле еҙнәй, - Бына һин, Ислам дине ҡанундарын белеп етмәйбеҙ, тип әйтә биреп ҡуйҙың. Закон эйәләренең “Незнание законов не освобождает от ответственности” тигән бер яратҡан һүҙе бар.

Эйе. Был донъяла мәңге йәшәгән кеше юҡ, ҡасан да булһа барыбыҙ ҙа Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуаплы буласаҡбѕя. Шуға күрә шәриғәт ҡанундарын белеү генә етмәй, уны үтәү ҙә мотлаҡ. Намаҙға баҫайыҡ. Һәммәбеҙҙең дә өмөтө һәм емеше - балалар. Балаларын нисек күрергә теләй, кеше үҙен дә шулай итеп тәрбиәләһен ине, ул саҡта киләсәгебеҙ яҡты һәм бәхетле булыр.

Өҫтәлдәге һауыт-һабаны йыйыштырып бөтөр-бөтмәҫтән, йәнә күңелле йырлап, самауыр килеп ултырҙы. Таралышырға өлгөрмәгән туған-тыумаса тағы табын тирәләй йыйылды.

Ваҡыт кискә табан ауышҡан. Тышта тынлыҡ. Әкрен генә бөртөк-бөртөк ҡар яуа. Күмәкләп ҡайтыу юлына сыҡҡанбыҙ. Һәр беребеҙ әле ишеткән мәғлүмәттәрҙе үҙләштерә. Үҙ-ара тыныс ҡына һөйләшеп барабыҙ. Бына шулай изгелекле лә, фәһемле лә мәжлестән ҡайтып килгәндә тағы бер ваҡиғаның шаһиты булдыҡ. Урамдар киҫешкән урында, арҡырыға туралап, йәйәүлеләр ҡарҙан һуҡмаҡ һалған. Шул боролмала ҡапыл ҡаршыбыҙға бер-береһен ҡултыҡлап, “сәмәй”ҙе артыҡ тейәп ташлаған ике ҡатын пәйҙә булды. Береһе - ҡарлыҡҡан, икенсеһе сәрелдек тауыш менән: “Мин һине шундай яраттым”, - тигән һүҙҙәрҙе тотлоҡҡан патефон кеүек һөрәнләй. Бер ниндәй ҙә мәғәнә аңлатмаған күҙҙәре менән үтә ҡарап, беҙҙе тапап тигәндәй үтеп киттеләр.

- Их, Ғүмәр ағайҙың һөйләгәндәрен ишетһәгеҙ икән дә бит. Быndaй көнгә төшкәс, һеҙҙе кемдәр ятаһын?, - тигән үкенесле ауаз яңғыраны күңел түрендә.

***(“Йәшлек” сайтынан).***